# *Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, скульптор Өлфәт ҠОБАҒОШОВ: «Скульптура — ул рух һаҡсыһы»*

*Скульптор оҫтаханаһы. Унда беҙҙе ғәжәйеп сәнғәт донъяһы ҡаршы ала. Әллә нисә кәштәгә теҙеп ҡуйылған иҫ киткес матур эштәр ниңә беҙҙең баш ҡалабыҙ урамдарын биҙәмәй икән, тигән уй килде шунда уҡ башҡа. Буласаҡ скульптураларҙың кескәй проект-варианттары — ниндәй генә эштәр юҡ бында! Стенала — ҡурай, ағас ҡурай, тыуған яҡтарында үҫкән үләндәр, башҡорт милли биҙәктәре менән сигелгән таҫтамалдар... Тирә-йүнендәге 600-ҙән ашыу топонимик исемдәр менән бирелгән Таймаҫ ауылы картаһын һәм үҙенсәлекле итеп төҙөлгән шәжәрәһен скульптор үҙе эшләгән. Бер яҡ стенаны тотош тултырып, иң боронғо осорҙан башлап беҙҙең көндәргә тиклемге донъя, Рәсәй, Башҡортостан кимәлендәге скульптура өлгөләренең һүрәттәре ҡуйылған. Ошондай илаһи эштәргә ҡарап нисек һоҡланмайһың да, нисек үҙең дә мөғжизәле һындар тыуҙырмайһың?*

**— Өлфәт, нимә ул һинең өсөн скульптура?**

— Барыһы ла: тарих та, сәнғәт тә, үткән дә, бөгөн дә, киләсәк тә. Иң боронғо мәғлүмәттәр беҙгә ташта һынландырылып, ташты соҡоп яҙыу арҡаһында килеп еткән. Мәмерйәгә сыйылһынмы, ҡаяға уйылһынмы — кешелек үҙ тарихын, сәнғәтен киләсәк быуынға шулай ҡалдырған. Скульптура — етди жанр, унда мәңгелек төшөнсәләр һынландырылырға тейеш. Скульптура — ул беҙҙең рух һаҡсыһы.



**— Бөгөнгө көндә нисә эшең бар?**

— Уларҙы тотош һанағаным юҡ. 2007 йылда төҙөгән альбомымда исемлеккә бөтәһе 75-ләп атама индерелгәйне, унан һуң 40-лаған эш ижад иткәнмендер.

**— Шундай һоҡланғыс эшең — “Зөһрә ҡыҙ” композицияһы тәүге ҙур әҫәрең булдымы? Уны ижад итеү идеяһы нисек тыуҙы?**

— Мин Байконурҙа хеҙмәт иттем. Унда һалдаттарға фотоға төшөрөргә рөхсәт ителмәне. Берәүгә ата-әсәһе посылка менән

фотоаппарат ебәргәйне, тикшереп ҡараусылар шунда уҡ бәреп ватты. Мин өйгә: "Әгәр посылка ебәрергә уйлаһағыҙ, ҡаҡ, ҡорот ҡына һәм башҡортса китаптар ебәрегеҙ", — тип яҙҙым. Китаптар менән бергә ризыҡтарҙы төрөп ебәргән гәзиттәр араһынан бер бейеүсе ҡыҙ һүрәте төшөрөлгән гәзит тә килеп сыҡты. Ул данлыҡлы артистка Рәшиҙә Туйсина ине. Һүрәтте киҫеп алып, һәр саҡ үҙем менән йөрөттөм һәм көндәлемдә ошондай юлдар тыуҙы:

### Тыуған илем — нурлы йөҙөм

Бер һүрәт бар миндә, һылыу башҡорт ҡыҙы,
Йәшел елән кейгән өҫтөнә.
Толом сәскәйҙәре төшөп тора
Һуҙылып-һуҙылып тубыҡ өҫтөнә.

Йәшел генә елән — йәшел келәм,
Хәтерләтте Тыуған илемде.
Еләне ул — хәтфә болондары,
Тәңкәләре — ҡыңғырау сәскәләре,
Башҡортостан тигән илемдең!

Ә һылыуҙың йөҙө — ҡояштың үҙе,
Бар донъяға һүнмәҫ нур һибә!
Ҡалҡыу күкрәктәре — мәғрүр тауҙарылыр,
Толом сәскәйҙәре — йылғалары,
Минең гүзәл Тыуған илемдең!

Ҡашмауҙары уның — йәшмә таштар,
Нескә бармаҡтары — моңло ҡурайым.
Бик һағынһам Тыуған илкәйемде,
Уға ҡарап ҡайтып урайым.

Әл дә һин бар әле, минең һүрәткәйем,
Ә һүрәттә — нурлы йөҙкәйең.
Ни эшләр инем икән, һин булмаһаң,
Алһыу йөҙлө минең гүзәлкәйем,
Ғәзиздәрҙән ғәзиз Тыуған илкәйем!

*10—11 ғинуар, 1971 йыл, Байконур.*

Күрәһегеҙ: теүәл 45 йыл үткән икән дә... (Әңгәмәнең һуңындараҡ Өлфәт шиғырҙар, ҡулдан төшөрөлгән һүрәттәр менән иллюстрацияланған тотош бер шиғырҙар дәфтәрен күрһәтте! — ***З.Ҡ.***)

Фотоальбом эшләргә ярамағас, "дембелгә" альбомдарға һүрәттәр төшөрөп, йырҙар, шиғырҙар яҙа инек. Тыуған яҡтан килгән һүрәткә ҡарап илһамланып, еләнле ҡыҙ һүрәтен төшөрҙөм. Урыҫтар күреп ҡалды ла: "Миңә лә шул ҡаҙаҡ ҡыҙын төшөр әле", — тип альбомдарын һона башланы. "Ул ҡаҙаҡ түгел, ә башҡорт ҡыҙы", — тим. "Кем булһа ла, бигерәк матур", — тинеләр. Бер яғына — Ҡаҙағстанды һынландырған тирмәләр, ҡомло дала, дөйәләр, ҡояш, икенсе

яғына — әлеге еләнле башҡорт ҡыҙын төшөрөп бирәм. Барыһына ла эшләп өлгөрә алмағас, уны үҙҙәре калька аша күсереп яһай башланылар. Шулай итеп таралып китте был һүрәт. Еләнле ҡыҙ тигәндәй, ошо һүрәткә ҡарап һоҡланып, тыуған яҡты һағынып, күп кенә рәсем: “Һыуға барыусы ҡыҙ”, “Һыу һирпеп алыусы ҡыҙ”, “Һыу менән уйнаусы ҡыҙ”, “Һылыу ҡыҙҙар”, “Ҡайын-ҡыҙҙар” һәм башҡа һүрәттәр төшөрҙөм һәм шиғырҙар яҙҙым.

**— Бәләкәй саҡтан да, йәш ваҡытыңда ла баҫалҡы булғанһың икән. Мәктәптә беҙ бер осорҙараҡ уҡығайныҡ, һине рәссам итеп хәтерләй алмайым һис тә...**

— Шулайыраҡ булғанмындыр. Иң башта: “Арағыҙҙа рәссамдар бармы?” — тип һорағас та әллә күпме һалдат бер аҙым алға сығып баҫып, үҙҙәрен күрһәтергә тырышты. Ә аҙаҡ уларҙың эштәре минекенән күпкә ҡайтыш икәнлеге беленде. Ләкин бер ваҡытта ла үҙемде күрһәтергә ынтылманым.

**— Әммә рәссам булырға теләгең Өфө сәнғәт училищеһына килтергән.**

— Эйе, армиянан ҡайтҡас, унда инеп ҡараным. Ләкин тәүге йылда конкурстан үтә алманым, сөнки ҡалала һынлы сәнғәт мәктәбендә уҡып, әҙерлекле килгәндәр күп булды. Бер йыл эшләп алған арала ныҡлап әҙерләндем, күп һүрәттәр эшләнем. Икенсе йылы имтиханда композициянан ирекле тема бирҙеләр. Мин әлеге шиғырҙа яҙылған сюжетты — еләнле башҡорт ҡыҙын эшләргә тотондом. Экзамен эше барышында танылған рәссам Ләбиб Моғтабаров ағай яныма килеп туҡтап ҡарай ҙа үтә, ҡарай ҙа үтә. Бер аҙҙан тағы килде лә: “Был — Башҡортостанды һынландырған символмы?” — тип һораны. Шунан: “Һиндә монументаллеккә ынтылыш бар. Ул һәр кешелә лә булмай”, — тине. Бөтә эштәремде ҡарағас, мине II курсҡа алдылар. Скульптураға, ғөмүмән, милли сәнғәткә юл күрһәтеүсе тәүге уҡытыусым — Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ғүмәр ағай Мөхәмәтшин булды. Ул ябай ғына рәссам-скульптор түгел, ә күп яҡлы, башҡорт халҡының тарихы, этнографияһы, сәнғәте, әҙәбиәте менән таныш булған, һәр саҡ ҡыҙыҡһынған кеше. Өфө дәүләт сәнғәт институтында художество факультетының скульптура бүлегендә уҡығанда профессиональ скульптураға ныҡлы аяҡ баҫтырыусы Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, профессор Николай Александрович Ҡалинушкин ине. Ә ошо юғары уҡыу йортона әйҙәүселәр, ижадыма ҡанат ҡуйыусылар — халҡыбыҙҙың күренекле вәкилдәре, Башҡортостандың халыҡ рәссамдары, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаттары Эрнест Миңлеәхмәт улы Сәйетов менән Рәшит ағай Зәйнетдинов булдылар.

Шулай итеп, гәзиттәге тәү ҡарауға ябай ғына шул һүрәт һәр ваҡыт тормошомда оҙатып килә.

**— “Зөһрә ҡыҙ”ҙың идеяһы, тимәк, һалдат сағыңда уҡ тыуған булып сыға инде...**

— Шулайҙыр. Әммә “инеше” бала саҡтарҙан, атай-әсәйҙәрҙән, оло быуын вәкилдәренән легендалар тыңлап, тулған айға ҡарап хыялланып, матурлыҡты күреп, ҡатын-ҡыҙҙың һылыулығына ҡарап һоҡланып үҫеүҙән киләлер.

Училищены бөткәс, И.Мечников исемендәге институтҡа эшкә килдем. Ул саҡта директор булып Риза Шәйехйән улы Мағазов эшләй ине. Бер көндө ул мине саҡырып алды ла: “Институт эргәһендә хеҙмәткәрҙәр өсөн ял биләмәһе эшләргә кәрәк, фонтаны ла булһын ине”, — тине. Тиҫтәгә яҡын вариант тәҡдим иттем. Төрлөләре бар: ҡатмарлы ла, ябайҙары ла. Һәр берeһенә милли колорит һалдым. “Зөһрә ҡыҙ”ҙы бөтөнләй бер яҡ ситкә генә ҡуйғайным. Бөтә эштәрҙе лә ҡарап сыҡҡас, күҙе әлеге һынға төштө. “Ошо миңә оҡшай, эшләй алаһыңмы?” — тине.



Тап шул ваҡытта күренекле ғалим-геолог, яҡташым Диҡҡәт Бураҡаевтың ҡәберенә мәрмәрҙән барельеф эшләргә тура килде. Геологтарға рәхмәт — Урал аръяғына барып, биш машина таш алып ҡайттыҡ. Бер машинаға пионерҙар һыу буйындағы йәшмәләрҙе хатта күнәкләп йыйып тултырҙы. Шуларҙан фонтан аҫтына мозаика эшләнек. Ике йылға һуҙылды был эш. Матурлыҡты аңлай, күрә белгән Рәис исемле аппаратсы егет ярҙам итеште. Миндә ул саҡта яңы ғына сыҡҡан "Башҡорт дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле" исемле төҫлө фотоальбом бар ине. Ул китаптың тышлығында төшөрөлгән Рәшиҙә Туйсинаны күрҙе лә: "Әйҙә, саҡырып килтерәйек тә, унан ҡарап эшләрһең", — ти. "Эйе, — мин әйтәм, — килеп ултыра, уларҙың ваҡыты бар, бер илдән икенсе илгә бер туҡтауһыҙ гастролгә йөрөйҙәр", — тим. Шулай ҙа ситтән ҡарап һоҡланып, фотоларҙан эшләргә тырыштым. Шул уҡ ваҡытта йөҙөн оҡшатып, башҡа ерҙәрен хилаф эшләһәм әгәр, үҙенә әйтмәй, рөхсәтһеҙниһеҙ, кешене үпкәләтермен, тип тә уйлап, декоратив, йыйылма образ юлын һайларға тура килде. Эшләп ҡуйғас, барыбер күптәр, хатта уҡытыусым, күренекле скульптор Н.А.Ҡалинушкин да: "Туйсинаны эшләгәнһең", — тине. Был, әлбиттә, минең эшемә ҙур баһа, тип аңлайым. Сөнки мин хәҙер, профессиональ скульптор булараҡ, шуны әйтә алам: донъяның бөтә ҡитғаларын бер нисә ҡат урап сығып, башҡорт бейеүенең бөтә нескәлектәрен, һығылмалыҡтарын бөтөн халыҡтарға күрһәтеп, башҡорт ҡатын-ҡыҙының ҡабатланмаҫ матурлығын, нәзәкәтлелеген, тыйнаҡлығын асып, бейеү әлиһәһе тигән исемгә лайыҡ булып, тимәк, башҡорт тигән халыҡты бар донъяға танытҡан икән, ул ысынлап та, Салауат Юлаев кеүек үк, Башҡортостандың символы һымаҡ ҡабул ителә. Шуныһы йәл, заманында мәрмәр ваҡы ҡушылып эшләнгән скульптура ваҡыт үтеү менән реконструкция талап итә, туҙа. "Иммунопрепарат"та етәкселек алмашынғас, был хаҡта уйлаусы кеше юҡ. Шуға күрә мин, автор булараҡ, скульптураның яңы вариантын эшләргә ниәтләнәм. Был осраҡта скульптура, әлбиттә, баш ҡаланың иң матур ял итеү урындарына ҡуйылып, Өфөнөң бер символына әйләнер ине.

Шуны айырып әйтергә кәрәк, әгәр ул саҡта сәнғәтте ятраҡан, күп яҡлы, моңға ғашиҡ, шиғри күңелле, һәр башланғысты эләктереп алыусы талантлы етәксе Риза ағай эшләмәһә, был композицияны тормошҡа ашырып булмаҫ ине. Уға бик ҙур рәхмәт.

**— Шундай матур, милли, илаһи ижад емешенең И.Мечников исемендәге институт биләмәһендә генә тороуы, баш ҡала халҡына билдәле булмауы йәнде әсендерә. Ул бит Өфөнөң иң күркәм урындарының береһен биҙәргә лайыҡлы!**

— Был хаҡта “Башҡортостан” гәзитендә һин дә, башҡалар ҙа, ә күренекле режиссер Әмир Абдразаҡов ағай “Вечерняя Уфа” гәзитендә яҙып сыҡтығыҙ. Өфөнөң бер юбилейында мине ҡала советына саҡырып алып, ошо мәсьәлә буйынса һөйләшеү ҙә булды. Архитекторҙар урын да билдәләгәйне. Финанс таба алманылар. Милли скульптуралар республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында ла, әйтәйек, Стәрлетамаҡта, Салауатта, Нефтекамала ла торорға тейеш. Улар бит халыҡта рух тәрбиәләй. Беҙ йоҡлап ятабыҙ, ти, йәки ситтә йөрөйбөҙ, ә скульптуралар һәр саҡ һаҡта тора. Уларҙың тәрбиәүи роле ифрат ҙур.

**— Һәйкәлдәр — тереләр өсөн. Һинең тыуған ауылың Таймаҫта йотлоҡ йылында аслыҡтан үлгән йөҙҙәрсә яҡташтарың рухына арналған һәйкәлташың зыяратҡа ҡуйылған. Был идея ҡайҙан килде?**

— Атай-әсәйҙең һөйләүенән ишетеп үҫтем: аслыҡ йылдарында ауылдың яртыһынан күбеһе — 500-ҙән ашыу кеше үлгән. Аҙаҡ архивтан асыҡлап белдем: 509 кеше булған. 1985 йылдарҙа атайым шул туғандар ҡәберлектәрен эҙләп табып күрһәтте. Селек, сейәлек баҫып бөткән уны. Зыяраттың майҙаны ла бик ҙур, табыуы еңел булманы. Бер урында — 150-ләп, икенсе ерҙә — 74, тағы бер урында — 84, тағы ике урында йөҙләп кеше ерләнгән. “Ерле иғтибарға алмайҙар, хәҙер белеүсе кеше юҡ, бер кемгә лә бер нәмә кәрәкмәй”, — тип әсенгәйне ул. Шул ваҡытта был урынға иҫтәлекле таш ҡуйырға тигән фекер уянды.

Әсәйҙең ҡәберенә таш эҙләп йөрөгәндә бер ҙур оҫтаханаға барып юлыҡтым. Ғәжәп матур “миңле” ташты күреп ҡалдым да ҡарап торам. “Нимә, оҡшаймы?” тиҙәр. “Атайым — Миңләхмәт, әсәйем — Миңлебикә, был таш та миңле”, — тип уйлап торам. Оҫтаханала тағы бер ҙур таш күҙгә төштө. Мин ауылыбыҙҙағы аслыҡ йылындағы хәлде һөйләп биргәс: “Ал, әйҙә!” — тинеләр. Шулай итеп, әлеге серпантинилит ташы мине генә көтөп ятҡан кеүек булды. Ул ҡиммәтле декоратив таш. Һәр биш ҡәберлекте билдәләп, тутыҡмай торған тимерҙән ҡолға ултыртып, осона ай беркетеп ҡуйҙым.

Йәш быуынды тере тарихты ла күрһәтеп тәрбиәләргә кәрәк. Беҙ, тереләр, ҡорбандарҙың рухтарына баш эйергә бурыслыбыҙ.

**— Һин атайың менән әсәйеңә лә бик үҙенсәлекле ҡәбер таштары ҡуйғанһың...**

— Атай-әсәйҙең ҡәберҙәрен кәшәнә формаһында эшләнем. Атайҙың ташына ырыуын, йәштәр белһен өсөн шәжәрәһен ырып яҙып ҡуйҙым. Әсәйҙекенә аҡ мәрмәр һайланым. Таш осона дүрт ҡош һынын уйҙым. Борон башҡортта, кешенең йәне, рухы ҡош булып оса, тигән ышаныу йәшәгән. Шуға күп ҡәбер таштарының өҫтөндә, ҡоштар ҡунып, һыу эсһен өсөн соҡорсоҡ уйып яһалған. Мин дә әлеге үҙем яһаған ҡоштарға символик һыу һауыты ла эшләп ҡуйҙым.

**— Беҙҙең Көйөргәҙе районы — республикала үҙенең бөйөк бер шәхесенә ике һәйкәл ҡуйған берҙән-бер төбәктер. Ҡинйә ауылында Ҡинйә Арыҫланов музейы алдындағы батырҙың бюсынан тыш, район үҙәге Ермолаевола хакимиәт бинаһы алдында ла уның һыны тора. Һин батырҙы яугир полководец һәм халҡыбыҙҙың аҡһаҡалы сифатында һынландырғанһың. Тарихтан билдәле булыуынса, Ҡинйәнең портреты һаҡланмаған. Һин уның образын ниндәй сығанаҡтарға нигеҙләнеп тыуҙырҙың?**

— Ҡыпсаҡ генотиптарын, Ҡинйә ауылындағы типаждарҙы күҙ алдыма килтерҙем. Бигерәк тә байрамдарҙа Ҡинйә Арыҫлановты һынландырыусы ҡурайсы Альберт Юлдыбаевтың мөһабәт һынын күҙ уңында тотоп эшләргә тура килде.

Дөрөҫ әйтәһең, беҙҙең яҡта тарихи шәхестәргә, геройҙарға, танылған әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәренә иғтибар ҙур. Бында, әлбиттә, иң беренсе ситатта район

хакимиәте башлығы Әхәт Йәүҙәт улы Ҡотләхмәтовтың һәр башланғысты хуплап алыуы, улай ғына түгел, үҙе инициатива күрһәтеүе бик мөһим. Былтыр, мәҫәлән, башҡорттарҙан тәүге Советтар Союзы Геройы Ғәфиәтулла Арыҫлановтың тыуыуына 100 йыл тулыу уңайынан район хакимиәте бинаһы алдына, Кинйә Арыҫланов һәйкәле эргәһенә, гранит постаментҡа батырҙың суйындан ҡойолған бюсы ҡуйылды. Киләсәктә бында тотош аллея буласаҡ. Дан ордендарының тулы кавалеры Хөрмәт Хөсәйеновҡа ла бюст ҡуйыу ҡаралған. Морапталда мәрмәр постаментҡа Баязит Бикбайҙың суйын бюсы, Ырымбурҙа Советтар Союзы Геройы Ғәфиәтулла Арыҫлановтың суйын портреты менән мәрмәр таҡтаташ ҡуйылды. Яманһары ауылында Сәғит Әлибаевҡа, районның бар Советтар Союзы Геройҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына һәм Ленин ордены кавалерҙарына мәрмәр, гранит таҡтаташтар ҡуйылды. Быларҙың барыһы ла етәксенең алдынғы ҡарашлы һәм милли рухлы кеше булыуына бәйләнгән. Ветерандар советы рәйесе Алексей Павлович Тарасовтың да тырышлығын әйтеп киткем килә. 1-се Кинйәабыҙ ауылы урынында “1-се Кинйәабыҙ” тарихи-этнографик ҡурсаулығы төҙөлдө. Яҡшембәттә Ҡараҡужаҡ Мишәүле бейҙең барельефы суйындан ҡойолоп, гранит һәйкәл эшләнде.



**— Тарихты өйрәнеп, иҫ киткес бай мәғлүмәткә эйәһең...**

— Шәхестең яҙмышын, шул осорҙоң тарихын белмәй тороп, скульптура эшенә тотонорға ла ярамай. Мәҫәлән, “Төньяҡ амурҙары”н һынландырғанда мин архивтарҙы ныҡлы өйрәндем, әҫәрҙә нәҡ башҡорт тоҡомло атты эшләнем. Яугирҙарҙың ҡоралдарын, яу кейемдәрен, походҡа алған шул замандағы көнкүреш әйберҙәрен белмәй тороп, нисек ижад итмәк кәрәк?! Бында тарихсы ғына түгел, ә этнограф та булыу мөһим.

**— “Төньяҡ амурҙары” хаҡында тәүгә ишетеүем. Ғөмүмән, һинең оҫтаханаңдағы эштәрҙе күреп һоҡландым да, аптырашта ла ҡалдым. Халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре Әхмәтзәки Вәлидигә, Аҡмуллаға, Зәйнәб Биишеваға арналған әллә күпме скульптура һындарың бар. “Зөһрә ҡыҙ”ға тиң бик күп шиғри композициялар ниңә һинең оҫтаханаң кәштәләрен генә биҙәй? Улар Өфөбөҙҙөң иң төп урындарын биләргә тейеш түгелме ни?**

— Аҡмулланың 14 вариантын, Зәйнәб Биишеваның 5—6 һынын эшләгәнмен. Әхмәтзәки Вәлидигә арналған композицияны эшләгәнгә хәҙер 25 йыл ваҡыт үтте. Әгәр ҡайҙалыр ҡуйырға тигән мәсьәлә килеп тыуа икән, ижадымды тәҡдим итергә әҙермен. Тик, конкурс була тороп та, был эштәр ниндәйҙер ҡаршылыҡтар арҡаһында туҡтап ҡала, йәки финанс юҡлыҡҡа һылтанырға ғәҙәтләнеп киттеләр. Алдар батырға монументаль һәйкәл эшләнем. Тик баймаҡтар уны үҙҙәрендә ҡуйыу мәсьәләһен һаман хәл итә алмайҙар.

Шиғри композициялар тигәндәй, минең ижадымда скульптура менән шиғыр йәнәш бара. Ошо уҡ “Зөһрә ҡыҙ” композицияһын эшләгәндә тоташ бер шиғырҙар циклы үҙенән-үҙе яҙылды. Тарихи шәхестәр, батырҙарҙы һынландырғанда улар тураһында йырҙар, хатта поэмалар тыуа. Миҫалдар күп: Ғәзиз Әлмөхәмәтовты һынландырғанда уның шәхесен асыҡлап, заманында үҙен күреп белгән оло быуын вәкилдәренән һорашып, архив материалдарын өйрәнеп, мәҡәлә баҫтырҙым. 1921—1922 йылғы аслыҡ ҡорбандарына һәйкәл төҙөгәндә лә архив материалдарын, документтарҙы өйрәнеп, “Башҡортостан”да ҙур күләмле мәҡәлә сығарҙым. Ҡинйә Арыҫлановҡа, Мөхәммәт Исҡужинға һәм башҡа шәхестәргә скульптуралар эшләгәндә лә улар тураһында мәҡәләләрем сыҡты. “Зөһрә ҡыҙ”ға оҡшаған бик күп шиғри композициялар ниңә һинең оҫтаханаң кәштәләрен генә биҙәй?” — тигән һорауға мин былай яуап бирер инем: “Риза Шәйехйән улы Мағазов кеүек шиғри күңелле етәкселәрҙең хәҙерге заманда булмауында”.

**— Ниңә беҙҙең башҡорттар араһында скульпторҙар аҙ?**

— Сәнғәт училищеһын тамамлағас, бер иптәшем менән Мәҙәниәт министрлығына барып, Мәскәүгә, Ленинградҡа йәки Латвияға скульпторлыҡҡа уҡырға ебәрергә йүнәлтмә һораныҡ. Уларҙа электән килгән көслө мәктәп бар. Ул саҡта автономиялы республикаларҙан килгән абитуриенттарҙың документтарын йүнәлтмәһеҙ ҡабул итмәйҙәр ине. “Үҙебеҙҙә уҡығыҙ, ундай мөмкинлегебеҙ юҡ”, — тип ебәрмәнеләр. Ләкин ул саҡта Өфө дәүләт сәнғәт институтында скульптура бүлеге юҡ ине. Беҙҙә бүлек асылғас, тәүге йылды — дүрт, икенсе йылды ике кеше алдылар, өсөнсө йылына бер кемде лә ҡабул итмәй, дүртенсе йылына тағы икәүҙе генә ҡабул иттеләр. Быны сәбәбе — әҙерлекле абитуриенттарҙың булмауы. Ә скульптурала әҙерлекле кешеләр кәрәк. Һынлы сәнғәт, графика менән генә шөғөлләнгән рәссамдар скульптура жанрында эшләй алмай. Унан һуң, уҡыу йортон тамамлаусыларҙың да артабанғы ижади яҙмышы ҡатмарлы. Ҡемдәрелер күргәҙмәләр өсөн генә ижад итә, икенселәренең эштәре, ихтыяж юҡлыҡтан, күберәк оҫтаханаларында ята. Был ауыр хәл ижад кешеһенең күңелен төшөрә. Финанс юҡ, заказдар юҡ. Ә ғаиләне ҡарарға кәрәк. Скульпторҙар бар, әммә күптәр икенсе өлкәлә эшләргә мәжбүр.

**— Образдар өҫтөндә нисек эшләйһең?**

— Ҡалыплашмаған юлдар эҙләйем. Мәҫәлән, Санкт-Петербург тау институтында Исмәғил Тасимовҡа ҡуйылған барельеф барокко стилендә эшләнде. Таҡтаташтың бер яғында ҡулына һөңгө тотҡан, биленә ҡылыс аҫҡан башҡорт кешеһе. Артҡы планда — ғәйнә ырыуының изге йәнлеге — болан төшөрөлгән. Бөтә атрибуттары менән аҫаба башҡорт ер хужаһы итеп һынландырылды. Икенсе яҡта — урыҫ оҫтаһы, тимерсе. Был конкурста скульптура өлкәһендә бай традициялары булған ҡаланың әллә күпме ижадсылары ҡатнашты. Беҙҙең проект ойоштороусыларға композицияһы менән оҡшаны. Уртала атаҡлы башҡорт рудасыһы Исмәғил Тасимовтың һәм уның иптәштәренең XVIII быуатта Рәсәйҙә иң тәүге техник юғары уҡыу йорто — Тау училищеһын асыу тураһында яҙылған үтенесе буйынса батша указдары ла яҙылды. Бына ҡайҙа кәрәк ул тарихты белеү... Ике йыл буйына үҙ-ара хатлашып, ике ҡала — Өфө менән Санкт-Петербург араһында барған, хәл ителмәгән мәсьәләне беҙ күренекле геолог, ғалим Миңләхмәт Моталов ағай менән барып, бер аҙна эсендә хәл итеп ҡайттыҡ. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тулыу уңайынан башҡарылған ҙур сараның иң тәүгеһе булды ул. Ошондай уҡ таҡтаташты Исмәғил Тасимовтың тыуған яғы — Пермь крайының Ҡуян ауылына ла алып барып ҡуйҙыҡ. Әммә

үҙебеҙҙә Исмәғил Тасимов исемендәге Аҡъяр тау колледжы алдындағы майҙанда ҡуйылырға тейешле мөһабәт һәйкәл дә, финанс юҡлыҡҡа һылтанып, проект көйөнсә тороп ҡалды.

**— Бер ғаиләнән ике ижадсы үҫкәнһегеҙ. Ағайың — Айрат Ҡобағошов — күренекле композитор. Быңдай һәләттең тамыры, моғайын, атай-әсәйегеҙҙәлер...**

— Ундай хәлдәр бар — бына һеҙ ҙә апайығыҙ Миңлегөл Хисамова менән икегеҙ ҙә шағирәләр бит...

Был атай-әсәйҙән генә түгел, ә олатай-өләсәйҙәрҙән киләлер, тип уйлайым. Әсәйҙең әсәһе — Мәрхәбә өләсәйем, мәҫәлән, оҫта мейессе, балаҫ һуғыусы, милли кейем тегеүсе, биҙәүсе булған. Мейесте ябай ғына итеп сығармаған, ә барельефтар менән эшләгән. Мәҫәлән, бер мейестә таҫтамалдар элә торған урындар, ҡомған ултыртырға соҡолтайҙар эшләп, батмус рәүешендәге алғы яҡҡа сәй эсеп ултырған әбей, бабайҙы ла һынландырған. Был — башҡорт декоратив сәнғәтенең бер төрө, бәләкәй архитектура формаһы. Өләсәйем бик матур балаҫтар ҙа һуҡҡан. Әсәйем дә уның был эштәрен дауам итте. Әсәйем — Ашҡаҙар буйынан, юрматы ырыуы ҡыҙы, Бала Сытырмандан Таймаҫҡа килен булып төшкән. Уның боронғо йырҙарҙы башҡарыуын, "Алпамыша" кеүек эпостарҙы һамаҡлап, көйләй-көйләй һөйләүен тыңлап үҫтек.

Атайҙың атаһы — Ғимран сәсән. Тирә-яҡта билдәле йырсы, боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын яҡшы белеүсе, оҫта башҡарыусы, бәйетсе булған. Атайым феноменаль хәтерле кеше ине. Өфөлә уҡығанда ниндәйҙер өлкәлә берәй һорау тыуһа, "атайҙан һорарға" тип дәфтәргә яҙып ҡуя инем. Ҡайтып һорағас, ул боронғо замандарға төшөп, көтөлмәгән, беҙ бөтөнләй белмәгән нәмәләрҙе һөйләп, аңлатып бирер ине.

Атай боронғоно һаҡлап йөрөтөүсе кеше булды. Бик моңло йырлай ине. Ҡулы ипле, төрлө һөнәргә оҫта булды. Беҙҙең ижадҡа ла йоғонто яһаны, әлбиттә.

**— Өлфәт, һин үҙең дә ижади ғаилә ҡорғанһың. Тормош иптәшең — Башҡортостандың халыҡ артисткаһы, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында эшләгән Рәмилә Ҡобағошова. Ижад кешеләре булыуығыҙ бер-берегеҙгә ярҙам итәме? Сер булмаһа, нисек табыштығыҙ?**

— Яҙмыш үҙе таныштыра, насип булһа...

**— Скульптор һөнәре бер ҙә еңелдән түгел. Таштар менән эшләү үҙе ювелир оҫталығы талап итә. Унан тыш, кәрәкле материал табыу ҙа мәшәҡәтле эш. Ниндәй таш һынландырыуға ҡулайыраҡ, "тыңлаусанраҡ"?**

— Иң ҡыйын, ауыр таш — гранит. Уның менән эшләргә өйрәнгәс, ҡалғандары "тыңлаусанға" әйләнә. Үткән быуаттың 80-се йылдарында граниттан байтаҡ эштәр башҡарылды. Мәҫәлән, күренекле композитор, Башҡортостандың беренсе халыҡ артисы, яҡташым Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа тыуған ауылы Морапталда гранит барельеф ҡуйҙыҡ. Баязит Бикбайҙың Өфөләге йортона бронзанан, граниттан таҡтаташ ҡуйылды. Юғарыла әйтеп кителгән бюсынан тыш, зыяратына ла минең проект буйынса суйын ҡойма менән уратылып, гранит стела ҡуйылды. И.Мечниковҡа ярымфигура итеп эшләнгән һәйкәл дә граниттан башҡарылды. Ике йылға һуҙылды был хеҙмәт. Гранит, мәрмәр бик һаҡ эшләүҙе талап итә, әҙ генә берәй ере кителеп төшһә лә, мәғәнәгә, йөкмәткегә хилафлыҡ килеүе ихтимал, кире төҙәтеп булмай. Красноусольский шифахананһы биләмәһендә табын ырыуы атрибуттарын, Күрпәс бейҙең барельефтарын суйындан ҡойҙортоп, ырыу, Табын ханлығы тураһында мәғлүмәттәр яҙылған суйын плита ҡуйылды.

Тирә-яғын суйын бағаналар, сынйырҙар менән уратып, ҡорған өйөп, уртаһына ҡырҡ тонна ауырлығы самаһы гранит стела урынлаштырып, “Табын ере” исемле мемориал комплекс төҙөнөк. Был эште атҡарыуҙа табын ырыуы ҡор башы, “Иммунопрепарат” дәүләт унитар предприятиеһы генераль директоры Мәхәмәт Мәхәмәтулла улы Алсынбаевтың өлөшө ҙур. Шулай уҡ санаторий етәкселегенең ярҙамы менән төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Тағы бер арҙаҡлы яҡташым — башҡорт халыҡ мәғрифәтсеһе Мөхәмәт ағай Исҡужин йәшәгән йортҡа, уның исемен йөрөткән лицей бинаһына суйындан ҡойолған барельеф менән мәрмәр таҡтаташ, зыяратына мәрмәр барельеф ҡуйылды. Был эштәр яҡташым эшҡыуар Иршат Аҫылғужиндың матди ярҙамы менән башҡарылды. Мөхәмәт Исҡужинға Күмертау ҡалаһындағы уның исемен йөрөткән урамға ҡуйыр өсөн бюсының гипс моделен дә эшләнем. Ҡала етәкселәре, заводта ҡойҙорторбоҙ, тип вәғәҙә итһәләр ҙә, эш һаман шул көйөнсә ҡала. Былардан тыш, граниттан, мәрмәрҙән һәм башҡа таштарҙан, металдарҙан бик күп эштәр башҡарылды.

**— Әле нимә өҫтөндә эшләйһең?**

— Был хаҡта матбуғатта хәбәр ителде инде. Бөрйән районында Шүлгәнташ мәмерйәһе эргәһендәге Йылҡысыҡҡан күле янында ҡуйыласаҡ ҡанатлы ат — Аҡбуҙатты эшләйем.

**— Өлфәт, мин һинең тағы ла бер шөғөлөңдө беләм: күп йылдар зыяраттарҙағы боронғо таштарҙы, ундағы яҙыуҙарҙы өйрәнәһең. Бының төп эшеңә бәйләнеше бармы?**

— Әлеге шул Байконурҙан башларға кәрәктер. Сержант мәктәбендә дүрт ай уҡығас, беҙҙе — курсанттарҙы — Ҡыҙыл-Урҙа өлкәһенә дөгө уңышы йыйышырға ярҙамға ебәрҙеләр. Һырдаръя йылғаһы буйында арыҡтан килгән һыу менән һуғарылған ҡомло далаға кис килеп етеп, дөгө һаламында ҡундыҡ. Төн һалҡын булды, йоҡлай алмай сыҡтыҡ. Эргәлә ауылдар юҡ, иң яҡыны 60 саҡырым самаһы тинеләр. Иртәгәһенә палаткалар ҡорһаҡ та, унда ла өшөп сыҡтыҡ. Капитан бортлы машинаға беҙҙе — бер нисә курсантты ултыртып, дала буйлап алып китте. 75—80 саҡырым үткәс, суҡайып торған бер нөктә күренде. Ҡилә торғас, ҙурайғандан-ҙурайып, бер ҡом ҡурғаны — зыярат булып сыҡты. Унда ҡыйшайып бөткән ҡәбер таштары аралаш саксауыл ағастары үҫә ине. Урта тирәләрәк, ҡалҡыу урында мөһабәт мавзолей урынлашҡан. Саксауылдарҙы тейәгәс, капитан кәшәнә эсенә керергә ҡушты. Керер алдынан мин бер семәрләп яҙылған ташты ҡарап уҡырға тырыштым. Ул күреп: “Уҡый алаһыңмы?”, — тигәс, мин: “Бер аҙ”, — тинем. Шунан тар ек-ишек аша ҡыҫылып, эскә үттек. Бейек көмбәҙҙең ҙур түңәрәк тишегенән төшкән яҡтынан төрлө төҫтәге таштар менән биҙәлгән стена ғәжәп матур уйнай. Уртала ҡомо ишелеп төшкән соҡор эсендә септәгә төрөлгән һөлдәләр күренә. Әммә стенаның аҫҡы өлөшөнә төрлө исемдәр, алама һүҙҙәр яҙылып бөткән. Офицер беҙгә стенаға кесе ярау итергә ҡушып, күҙәтә башланы. Башҡорт, татар, башҡа мосолман егеттәре үҙ-ара сырай менән ымлашып алдыҡ. Шунан мин: “Теге яҙыуҙы сығып уҡый торайым әле”, — тип тиҙерәк сығып киттем. Баҡтиһәң, был эш капитандың бер йәмһеҙ “йолаһына” әйләнеп киткән икән. Ҡайтҡас, офицер “йоланы” үтәмәгәндәргә соҡор ҡаҙырға ҡушты, шунан — соҡорҙо күмдерә, тағы ҡаҙыта. Бер әшәке бәндә булып сыҡты. Үҙе һүгенә. Минән: “Уҡыныңмы?” — тигәс, мин: “1417 йыл тигәнен асыҡ уҡыным, шундай-шундай исем яҙылған”, — тинем. Ул: “Эйе, Ебәк юлы буйында төҙөлгән”, — тине күпте белгән кеүек, һәм мин “язанан” ҡотолдом. Аҙаҡ урындағы ҡаҙаҡтарҙан һорашып белдем: Кенәс-Түбә тигән яһалма ҡурған икән ул урын, һәм атаҡлы Сарлытам мавзолейы булып сыҡты. Ә кенәс тигәне — ҡаҙаҡтың бер ырыу исеме. Мин быларҙы нилектән

һөйләнем: малай саҡта уҡ атай, әсәй: “Балалар, яланға барһағыҙ, яңғыҙ ятҡан ташҡа, яңғыҙ ағасҡа теймәгеҙ, ботағын да һындырмағыҙ — улар изге. Бәлки, шул урында боронғо ҡәбер, зыярат булыуы бар”, — ти торғайнылар. Шуға күрә миңә яланда ятҡан һәр таш та, суҡайып ҡына ултырған яңғыҙ ҡыуаҡ та изге кеүек күренде, аяҡтар үҙенән-үҙе уларға табан атланы...

Зыяраттарҙағы таштар — бәләкәй архитектура формаһы ул. Археологтар бик боронғо тарихты өйрәнә. Ә эпитафияларҙы тикшергән ғилми учреждениены белмәйем. Иршат Йәнбирҙин тигән журналистың үҙ инициативаһы менән яңғыҙы боронғо таштарҙы эҙләп, өйрәнеп йөрөгәне, тырышлыҡ күрһәткәне тураһында хәбәрҙармын. Эпиграфика тигән фән ул. 2015 йылда Ғәбдрафиҡ хәҙрәт менән ете зыяратта булдыҡ. Боронғо таштарҙы фотоға төшөрәм. Ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған текстарҙы шамаилға әйләндереү, уларҙы каллиграфик стилдә, матур итеп яҙыу менән дә шөғөлләнәм. Ул күп ваҡытты ала, оло түҙемлек талап итә. Мәҫәлән, Миәкә районындағы Нарыҫтау башында — сәхәбәләргә ҡуйылған ҡәбер ташындағы яҙыуҙарҙы унда булыусылар күргәндер. Унда минең дә өлөшөм бар.

Башҡортостанда ғына түгел, Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә, Пермь крайындағы 20—30-лап зыяратта булдым. Шулар араһында билдәле шәхестәрҙең ҡәберҙәре лә килеп сыға. Ғәрәпсә уҡый белмәү сәбәпле, ауылдағы халыҡ күп осраҡта унда кем ерләнгәнен теүәл генә белмәй. Таштағы яҙыуҙы уҡыу ифрат ауыр, дөрөҫ уҡыр өсөн шул урынға ҡайһы саҡта 2—3 тапҡыр барырға тура килә. Эпиграфика беҙҙә — Башҡортостанда әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән өлкә.

**— Был эштәреңде лә китап итеп сығарырға уйлайһыңмы?**

— Ҡәбер таштары ла — беҙҙең тарихыбыҙ. Уларҙы белергә, һаҡларға, килер быуындарға тапшырырға кәрәк.

**— Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов менән бергә байтаҡ йылдар элек “Ғәрәп теле. Башлап өйрәнеүселәр өсөн” тигән дәреслек тә сығарғанһығыҙ.**

— Эйе. Ҡитаптың ғәрәпсә каллиграфияһын, йөҙҙән ашыу рәсемен, биҙәлешен мин ҡулдан эшләнем, ул да ике йылдан артыҡ ваҡытымды алды.

**— Ең һыҙғанып ижад итерҙәй сағыңда 33 йыл ваҡытыңды И.И.Мечников исемендәге институтта эшләп үткәргәнһең. Шул ваҡытың йәл түгелме?**

— Әлбиттә, күпме ғәйрәт шунда китте. Ләкин мин унда ҙур масштабтағы, күләмле эштәрҙе тиҙ башҡарырға өйрәндем. Эш араһында архив материалдарын өйрәндем, фольклор йыйҙым, райондарға, күрше өлкәләргә экспедицияларға сыҡтым, ике йыл буйына тыуған яҡты өйрәнеү музейына, ҡулдан яҙып, һүрәттәр төшөрөп, экспозициялар эшләнем. Төп эшемдән тыш, ул йылдарҙа ла ижадтан айырылманым. Юғиһә, ошо эштәрҙе ҡасан башҡарып өлгөрөр инем?

**— Ысынлап та, ошо хәтлем эштәргә ҡарап, быларҙы бер кеше башҡарғанына ышанырлыҡ та түгел. Һин бит әле “Таймаҫ ауылы (Бөрйән улусының айырым биләмәһе)” тигән ҙур тарихи хеҙмәттең авторы ла.**

— Үҙ эшеңде яратһаң һәм ваҡыттың ҡәҙерен белһәң, шул саҡта бөтәһенә лә өлгөрөргә булалыр, тип уйлайым.

Торатау эргәһендә төҙөләсәк “Ырыуҙар ташы” монументаль комплексы ла оҙаҡламай тормошҡа ашыр, тип уйлайым.

**— Һинең тиҙҙән Шүлгәнташ мәмерйәһе янына ҡуйыласаҡ ҡанатлы Аҡбуҙатың бар. Шундай мифик атты ауыҙлыҡлаған рухлы шәхесебеҙгә артабан да уңыштар йылмаймай ҡалмаҫ.**

— Рәхмәт.

*Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА әңгәмәләште.*